# СЕМИНАРҘАР — ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ

Март айында Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында республика Журналистар союзы тарафынан ойошторолған "Визуаль журналистика. Гәзитте дөрөҫ дизайнлау" темаһына семинар уҙғарылды. Район, ҡала һәм республика баҫмалары журналистары ике көн дауамында гәзитте макетлау нигеҙҙәрен, шрифттарҙы дөрөҫ ҡулланыу, графика, иллюстрация ысулдарын һәм башҡа мөһим мәсьәләләрҙе ентекле өйрәнде, үҙ баҫмаларын анализлап, булған кәмселектәрҙе бөтөрөү өҫтөндә эшләүҙе маҡсат итеп ҡуйҙы. Семинарҙы мәғлүмәти технологиялар, гәзит дизайны, ВЕБ-сайттар эшләү һәм гәзиттәрҙең электрон версияларын булдырыу буйынса белгес А.Е.Костицын (Екатеринбург ҡалаһы) алып барҙы.



*М.Ҡотлоғәлләмов һәм А.Докучаева семинар алып бара*



Ә "Ватандаш" журналы редакцияһында уҙғарылған семинар "Очерк жанры бөгөн" тип аталды. Ошо тема буйынса бер төркөм журналистар менән күренекле очеркистар Рәүеф Насиров, Сәлимйән Бәҙретдинов, Алла Докучаева, Марсель Ҡотлоғәлләмовтар шөғөлләнде.

Тәүҙә сәсмә-документаль әҙәбиәт ниндәй фәһемле хеҙмәттәр менән тулыланыуы тураһында мәғлүмәт бирелде. Мәгәр һуңғы йылдарҙа республика баҫмаларында, район гәзиттәре биттәрендә очерктарҙың һирәк күренеүе, был жанр оҫталарының сафы һирәгәйеүе һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Артабан остаздар һүҙлектәргә, энциклопедияларға, арҙаҡлы әҙиптәрҙең фекерҙәренә нигеҙләнеп, очерктың асылы, айышы, уның төрҙәре, үҫеше тураһында һөйләнә.



*С.Бәҙретдинов һәм Р.Насиров журналист оҫталығы дәрестәре бирә*

Очерк жанры оҫталары шулай уҡ үҙҙәренең ижад мөхите, китаптары менән таныштырҙы. Рәүеф Насиров ғәмәлдә тарихи очерктар яҙыу буйынса эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Уның Зәйнулла ишан, М.Аҡмулла, М.Мортазин, А.Матросов (Шакирйән Мөхәмәтйәнов) кеүек шәхестәргә бағышланған очерктары уҡыусыларға киң билдәле. Бөтә төр очерктар буйынса ла әүҙем эшләүсе Сәлимйән Бәҙретдинов тарихнамәләр, сәйәхәтнамәләр, ғибрәтле хәлдәр, зыялылар, эшһөйәрҙәр, сәнғәт әһелдәре тураһында очерктар яҙыу оҫталығы буйынса һабаҡ бирҙе. Семинарҙа ҡатнашыусыларҙың һорауҙары буйынса, художестволы, фәнни-популяр очерктарҙың жанр үҙенсәлектәре, һүрәтләү саралары буйынса ла фекер алышынды.

